Гүзәл НИЛОВА

# Аҡ бәхеттәр теләрмен...

Күңелдең нескә ҡылдарының өҙгөләнеүҙәрен, һағышлы минуттарҙы, шатлыҡлы ваҡиғаларҙы ҡыҙ бала ышанып ҡағыҙ биттәренә тапшырҙы... Яҙмыш берсә шаярта, берсә өмөтләндерә, берсә бар хыялдарынды селпәрәмә килтерә... Көндәлек дәфтәрҙәрҙең сырма биттәрендә яҙмыштың борма-борма юлдары һынлана... Һәр кеше лә хайран ҡалдырырлыҡ түҙемлек менән өҙлөкһөҙ көндәлек яҙа алмайҙыр.



Әлфиә Юлсурина

Кемдер бөтә донъяға оран һалып әйтә алмаҫлыҡ йөрәк хистәрен һүрәткә һала, кемдер шиғыр яҙа, кемдер сәсмә әҫәрҙәр ижад итә, ә Әлфиә Юлсурина күңел кисерештәрен йырҙарында сағылдыра һәм иң-иң серле хистәрен көндәлегенә теркәй. Уҙған йылда улар композитор Салауат Низаметдинов менән «Яндырылған көндәлек» исемле программаларын тамашасыларға тәҡдим иткәйне.

### «Бер сиге булалыр түҙеүҙең...»

Ябай кеше тормошонда көндәр бер-берененә һыуҙай оҡшаш төҫлө, артыҡ иғтибар итерлек нәмә юҡ кеүек. Ә бына ижад кешеләренең тормошо һәр саҡ иғтибар үҙәгендә.

Рәсәй эстрадаһының примайондоҙо Алла Пугачева бер интервьюһында былай тигәйне: «Ваннала яңғыҙ һыуҙа ятҡанда ла телекамерала, тамашасалар алдында сығыш яһағандағы кеүек, үҙемде һәр саҡ көслө иғтибар үҙәгендә тоям».

Тамашасылар күп ваҡыт үҙҙәренең сәхнә кумирҙарының ваҡытһыҙ ауырып китеүҙәрен дә ғәфү итмәй.

Әлфиә менән осрашҡанда һорауҙар әҙерләмәгәйнем. Әңгәмәне үҙ ихтыярына ҡуйҙым.

Иҫ киткес гүзәл урмандарға, бихисап йәнлектәргә, йылға-күлдәргә бай Бөрйән төбәгендә тыуып-үҫкән Әлфиә. Үткер, талапсан, хатта үтә ҡыйыу ҡыҙ булып буй еткән. Бала саҡтан уҡ йыр-моңға ғашиҡ әсәһе Фатима апай Ғәйнуллина клубта үткәргән һәр кисәлә ҡатнашып, бәләкәйҙән сәнғәткә, мәҙәниәткә һөйөү тойғоһо күңелендә үрелеп үҫә. Әле лә, инде үҙе танылған эст-

рада йырсыһы булғас та, Әлфиә әсәһен иң тәүге кәңәшсеһе, тәнҡитсеһе һәм иң ҡәҙерле уҡытыусыһы тип иҫәпләй.

Мәктәптә уҡыған йылдарында уҡ һәр концертта ҡатнашһа ла, Әлфиә сәнғәт юлынан китмәҫкә була. Сәбәбе... Сөнки ул ғашиҡ була. Беренсе мөхәббәт! Күптәрҙең күңелен арбаған, башын әйләндергән тойғо. Егетенең уның сәнғәт юлынан барыуын хупламауын тойоп, Әлфиә педагогия институтына ғариза бирә. Әммә яҙмыш үҙенекен итә: Әлфиә конкурстан үтә алмай. Һәр кешенең үҙ урыны, үҙ юлы бар был тормошта. Күпме ситкә тайпылып ҡарамаһын, йыр магнит кеүек Әлфиәне оло сәнғәт юлына алып сыға. Кеше үҙ бәхетен үҙе ҡора, тиҙәр. Әлфиә, киреһенсә, сәхнәгә сыҡмаҫҡа тырышып ҡараһа ла, йыр уны үҙе сәхнәгә әйҙәй.

Ураү юлдар, ҡатмарлы тупһалар уны Өфө сәнғәт училищеһына алып килә. Оло юлдан һыуһап килгән юлсылай, бар нәмәне онотоп, йырсы һөнәренә ылыҡты ул.

## «Һөйөүҙән төңөлөп»

Йыш ҡына тамашасыларҙың: «Әлфиә Юлсурина мөхәббәт йырҙарын шундай хисле, бөтә күңелен биреп башҡара. Йыры үҙе бер тамаша кеүек була», — тигәндәрен ишетергә тура килгеләй. Ысынлап та, репертуар һайлағанда, йырсы үҙе әйткәндәй, иң элек йырҙың һүҙҙәренә иғтибар итә. Әгәр йырҙың асылы, мәғәнәһе күңеленә хуш килмәһә, ҡабул итә алмай Әлфиә.

— Мин ысын мөхәббәткә ышанам. Үҙем дә онотолоп яратам. Яратмайса мөхәббәт йырҙарын йырлап буламы ни? — тине ул серле йылмайып.

Әлфиә Юлсуринаның репертуарында композитор Салауат Низаметдиновтың йырҙары ҙур урын биләй. Быны уңышлы ижади союз тип әйтергә кәрәктер. Әлфиә үҙе былай аңлатты:

— Салауат Низаметдиновтың көйҙәре һәм уның һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә дөрөҫ акцент яһауы оҡшай.

## «Хушлашырға иртә»

Әлфиә аккомпанементһыҙ халыҡ көйҙәрен башҡарғанда залда себен осҡан тауыш та ишетелерлек була. Йырсы бөтә йәне-тәне менән йырға һеңгәндәй тойола. Эстрада йырсыһына халыҡ ҡомартҡыһы ниңә кәрәк һуң? Әлфиә кәрәк тип иҫәпләй. Сөнки халыҡ йырҙары үҙе бер тәрбиә шишмәһе, уларҙа фәлсәфә лә, тәрбиә лә бар. Шуға ла репертуарына йылдан-йыл халыҡ моңо ынйыларын өҫтәй бара. Хатта башҡа йырсылар башҡарған йырҙарға ла үҙенсәлекле төҫ биреп тәҡдим итә белә. Әйткәндәй, йырсының киләсәктә халыҡ йырҙарынан ғына торған программа әҙерләргә ниәте бар: унда оҙон көйҙәр ҙә, таҡмаҡтар ҙа, шаян йырҙар ҙа буласаҡ. Үҙ-үҙенә талапсан йырсы йырҙың көйөнә, һүҙҙәренә генә түгел, сәхнәлә кейгән костюмдарына ҡарата ла шулай уҡ талапсан. Әйтәйек, «Яндырылған көндәлек» тамашаһына улар йәш модельер Г.Хөсәйенова менән махсус күлдәктәр әҙерләне. Ижад кешеһе үҙ һутында ғына ҡайнап йәшәй алмай. Аралашыу, бер-береңдең уңыштарына ҡыуаныу, ҡайғы-хәсрәттәрен уртаҡлашыу гәҙәте бар. Был иһә ижад ҡомарын арттырыуға булышлыҡ итә. Әлфиә көнсөл түгел. Беҙ осрашҡанда ла ул, үҙен онотоп, филармония йырсыларын маҡтарға тотондо. Бигерәк тә Нәзифә Ҡадированың тырышлығына, ныҡышмалылығына һоҡланыуын йәшермәне. Уның менән бергә рок-операла йырлағандарына ҡыуанды. Әле Әлфиә Юлсурина арыу-талыуҙы белмәй яңы программа өҫтөндә эшләй. Тамашасыны шатландырып, күңелен табыу — йырсы вазифаһы. Ә уны Әлфиә намыҫ менән башҡара. Еңел-елпе әҙерләнгән репертуар менән йондоҙ булырға хыялланған артистарҙың популярлығы оҙаҡҡа бармай. Әлфиә Юлсурина иһә йырҙарын етди ҡараш менән генә түгел, бөтә булмышын һалып йырлай. Ә йырҙар — тормош сағылышы. Улар дәртләндерергә, уйландырырға, илатырға һәм йырлатырға тейеш.